Государственное бюджетное общеобразовательное учреждение
Стерлибашевская коррекционная школа-интернат для обучающихся
с ограниченными возможностями здоровья

| | | |
|---|---|---|
| Рассмотрено на заседании<br>ШМО старшего звена<br><br>Протокол № 5 от<br>«29» мая 2018 г.<br>Руководитель ____ Каримова АА. | Согласовано<br><br>Заместитель директора по УР<br><br>____ Гайнуллина Д.Р.<br><br>«31» 08 2018 г. | Утверждаю<br><br>Директор<br>____ Афанасьев А.А.<br><br>«3» 09 2018 г. |

# Рабочая программа
# по башкирскому (государственному)языку
# для 4 класса

**Срок реализации программы 1 год**

**учитель**

**Хуснетдинова Ф.С.**

2018-2019 учебный год

Аңлатма яҙыу

Һаулығы буйынса мөмкинселеге сикләнгән уҡыусыларҙың 4 класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.
Эш программаһы В.В.Воронкованың VIII-се төрҙәге махсус(коррекция) дөйөм белем биреү һәм АООП Стәрлебаш һаулығы буйынса мөмкинселеге сикле уҡыусыларҙың махсус (коррекция) дөйөм белем биреү программаһына нигеҙләнеп төҙөлгән.
**Дәреслек:** Толомбаев Х.А.,
ДәүләтшинаМ.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2006.
**Программа кимәле :** базис.
**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:** Ғәбитова З. М., Толомбаев Х. А. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр. – Өфө: Башҡортостан, 2006. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт (дәүләт) теле һәм туған (башҡорт) тел буйынса берҙәм талаптар.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты : ТоломбаевХ.А., ДәүләтшинаМ.С. Башҡорт теле:** Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2006.
**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре: Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- )ф0, 2005.
Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәкдим ителгән программа Воя6ы муниципаль бюджет т0п дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.
**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошка ашырыла**
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.
**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

- Телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу, телдең системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү, бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.
- Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
- Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Маҡсаттар һәм бурыстар.**

- Балаларҙың һүҙлек запасын арттырыу, шул һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен әүҙемләштереү.
- Грамматик материалды үҙләштереү, уны дөрөҫ файҙаланып, бәйләнешле һөйләү, яҙыу күнекмәләрен артабан үҫтереү.
- Республиканың тәбиғәте, халҡы, улар араһында башҡорттар, уларҙың тормошо, тарихы, хеҙмәте, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары.
- Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре тураһында белемдәрҙе киңәйтеү.
- Программала бирелгән шиғырҙарҙы ятлау, башҡортса йырҙар өйрәнеү һәм башҡарыу. Башҡортса телмәр төҙөү.

**Уҡыу - уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау.**
**Баһалар нигеҙҙә уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.**

“5” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыһа,паузаларға иғтибар итһә,һорауҙарға тулы яуап бирһә уҡылған текстың йөкмәткеһентулы итеп һөйләп бирһә

“4” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы ижекләп уҡыһа,уҡығанда 1-2 хата ебәрһә,текстың йөкмәткеһен тулыитеп һөйләмәһә,шиғырҙарҙы уҡытыусы ярҙамында һөйләһә.

“3”-билдәһе әгәр уҡыусы ауыр һүҙҙәрҙе ижекләп тәу уҡый алмаһа. Паузаларҙы дөрөҫ ҡулланмаһа. Текстың йөкмәткеһен уҡытыусы ярҙамында һөйләһә .

**Яҙма эштәрҙе баһалау**

Контроль эштәр: контроль диктанттан һәм контроль күсереп яҙыуҙан тора. Шулай уҡ грамматик эштәр тәҡдим ителә.

Диктанттар күләме:
“2” синыф-уҡыу башында 10-12 һүҙ уҡыу аҙағында 16-18һүҙ
“3” синыф-20-25 һүҙ
“4” синыф-30-35 һүҙ

**Диктанттар**

“5”- әгәр эш бер хатаһыҙ эшләнһә
“4”-1-3 хата
“3”-4-5 хата

**Грамматик эштәр**

“5”-әгәр эштәр бер хатаһыҙ эшләнһә
“4”-3/4 эш дөрөҫ эшләнһә
“3”-1/2 эш дөрөҫ эшләнһә

**Контроль күсереп яҙыу**

“5”-хатаһыҙ дөрөҫ яҙылһа
“4”-бер хата һәм бер төҙәтеү
“3”- ике хата һәм бер төҙәтеү

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:
башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр,
тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
һорауҙарға яҙма яуаптар төҙөү;
тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеш диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеш диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәкдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән 4 – се класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**1-се сентябрь – Белем байрамы-1 сәғәт**

Бөтә балалар өсөн ҙур байрам- 1 сентябрь, уҡыу, йәйге каникул, белем көнө, класс, ундағы уҡыусылар, уларҙың эштәре тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре (ҡабатлау) . Темаға ҡараған һүҙ байлығын арттырыу, бәйләнешле телмәр төҙөү.

**Мәктәптә – 1сәғәт.**

Уҡыу, белем алыу, мәктәп тормошо, кластағы эштәр, мәктәп бинаһы, ундағы кабинеттар, дәрестәр тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт теленең лексикаһы. Һүҙ, уның лексик һәм грамматик мәғәнәһе (практик үҙләштереү).

**Ғаилә. Хеҙмәт- 3 сәғәт.**

Ғаилә ағзалары, уларҙың эш-шөғөлдәре. Ололарҙың һәм балаларҙың хеҙмәте. Һөнәрҙәр төрлө, уларҙың һәр береһе лә кәрәкле. Һөнәр һайлау. Башҡорт телендә исем. Исемдең күплек, берлек формалары. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Синоним, антоним исемдәр.

**Хобби. Буш ваҡыт – 4 сәғәт.**

Һәр кешенең яратҡан шөғөлө, төп эше була. Бынан тыш кеше ниндәйҙер эште ҡыҙыҡһынып башҡара. Балаларҙың башҡарған эштәре. Файҙалы эштәр. Кешеләргә ярҙам, киң күңеллелек тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт телендә эште, хәрәкәтте, белдереүсе һүҙҙәр (ҡылым). Ҡылымдың мәғәнәләре, берлек һәм күплек формаһы. Ҡылымдарҙың зат менән үҙгәреше.

**Транспорт. Юл. Сәйәхәт – 3сәғәт.**

Юлһыҙ тормош. Бөтә кеше юлда: йәйәүлеләр, машиналар, автобустар, троллейбустар. Юлдар ҙа төрлө. Юл ҡағиҙәләре бар. Уны күҙәтеү бик мөһөм. Юл буйлап сәйәхәткә лә сығалар. Сәйәхәттә кәрәкле әйберҙәр тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә ҡылым. Уның заман мәғәнәләре. Үткән, хәҙерге, киләсәк заманы. Уларҙың грамматик күрһәткестәре. Ҡылымдың һөйләмдәге урыны.

**Врачта. Поликлиникала – 2 сәғәт.**

Кеше үҙенең һаулығы тураһында үҙе хәстәрләй. Врачка күренә, төрлө дарыуҙар ала. Уҡыусының һаулығы ла бик мөһим. Шуға ла был тема буйынса күберәк балаларҙың һаулығы , сынығыу, көн тәртибен күҙәтеү кеүек мәсьәләләр тураһында әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу кәрәк. Башҡорт телендә сифат. Уның мәғәнәләре. Сифаттарҙың һөйләмдә исемгә бәйләнеүе. Дәрәжәләр менән үҙгәреүе.

**Почтала – 1 сәғәт.**

Почта, телефон, телеграф, интернет беҙҙең тормошҡа ныҡлап килеп инде. Уларҙы нисек файҙаланырға, почтала, телеграфта үҙенде нисек тоторға, телефондан нисек һөйләшергә – был мәсьәләләр бик мөһим. Был темала бына шулар тураһында белем, һәйбәт күнекмәләр биреү күҙ уңында тотола. Башҡорт телендә исем, ҡылым, сифаттарҙың һөйләмдә ҡулланылышы (практик күнекмәләр).

**Башкортостан тәбиғәте – 6сәғәт.**

Башҡортостандың бай тәбиғәте, үҫемлектәре һәм хайуандар донъяһы. Тәбиғәттәге предметтарҙың исемдәре, уларға ҡыҫҡаса характеристика биреү. Йылғаларын, күлдәрен белеү. Тауҙар һәм урмандар. Тәбиғәтте һаҡлау тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт телендә тиң киҫәктәр.Һөйләмдә уларҙың ҡулланылышын практик үҙләштереү.

**Башкортостанда иҫтәлекле урындар – 4 сәғәт.**

Башҡортостан ерендәге, Өфө ҡалаһындағы иҫтәлекле, уникаль урындар менән таныштырыу. Башҡортостандағы данлыҡлы уҡыу йорттары, сәнғәт һарайҙары. Уларҫа ҡыҫҡаса характеристика биреү. Тыйған төйәктең матурлығын күрһәтеү, әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу. Башҡорт телендә ябай һөйләм төрҙәре.

**Башҡортостандың күренекле шәхестәре – 3 сәғәт.**

Башҡортостан тарихында, уның бөгөнгө тормошонда күренекле шәхестәрҙең әһәмиәте бик ҙур. күренекле шәхестәр тураһында әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу. Һан, уның телмәрҙәге роле, һан төркөмсәләре.

**Ауыл тормошо – 3 сәғәт.**

Ауыл тормошо, ауыл кешкләренең көнкүреше, эш- шөғөлдәре. Игенсе, малсы мкңеханизатор хеҙмәте. Ауылда аттың файҙаһы тураһында һөйләшеү, текстар уҡыу. Алмаш, һорау һәм зат алмаштары, телмәрҙәге роле. Практик үҙләштереү.

**Башҡорт халыҡ ижады – 1сәғәт.**

Башҡорт халыҡ ижады тураһында төшөнсә. Әкиәттәр. Йырҙар. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Халыҡ ижадын өйрәнеүсе ғалимдар тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт телендә рәүештәр, телмәрҙәге роле. Практик үҙләштереү.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

**Телмәр күнекмәләре**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү:
- текстың планын төҙөү;
- текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү, билдәле ситуацияла тексты ижади дауам итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү:
- ҡараған фильм, картина, ишеткәндәр, бирелгән ситуация буйынса хикәйә төҙөп һөйләү;
- ваҡиғаға, геройҙарҙың эштәренә, ҡылыҡтарына баһа биреү, үҙ фекереңде иҫбатлау;
- тестағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү-тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу;
  тексты рус теленә тәржемә итеп һөйләү;
3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу:
- тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
- гәзит-журналдарҙан, китаптарҙан материал йыйып, хикәйә төҙөү;
- әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.
4. Хәрефтәрҙе дөрөҫ һәм матур яҙыу, дөрөҫ тоташтырыу:
- Иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.

Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре)

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙең үҙләштерелеүен баһалау**

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
   Уларға түбәндәгеләр инә:
   - башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
   - тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
   - дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
   - тестағы һорауҙарға яуап биреү
2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә.

Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән 4-се класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

**IV класс уҡыусыларының белем кимәленә талаптар:**

«Башҡортостан » темаһы буйынса (тәбиғәте, халҡы, уның тормошо, ҡалалары, йылға- күлдәре, кейем- һалымы, ижады ) тураһында әңгәмәлә ҡатнашыу, һөйләү**.**

- Тәҡдим ителгән ситуация буйынса һорауҙар бирә белеү, уҡытыусының (йәки башҡаларҙың) һорауҙарына яуап бирә белеү; яуаптарҙы дөрөҫ интонация менән асыҡ, аңлайышлы итеп әйтеү, һөйләү.
- Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.
- Ҡысҡырып шыма һәм тасуири уҡыу.
- Һүҙлек һүҙҙәрен белеү һәм уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
- Дәрестә өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү.
- 25-30 һүҙ күләмендә диктант яҙыу; ошо уҡ күләмдә ; ҡотлау хаты (открытка) яҙа белеү.
- Программала күрһәтелгән 1-2 башҡорт йырын башҡара белеү, мәктәптең үҙешмәкәр сараларында ҡатнашыу, сәхнәлә сығыш яһау. Бөтә был эштәр тураһында бәйләнешле һөйләй белеү.

**Башҡорт (дәүләт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар.**

1. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
2. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М. С., Сиразетдинов З. Ә. Башҡортса өйрәнәйек. Урыҫ мәктәптәренең 1 - 4 – се синыфтары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек. – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
3. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.- Өфө:Китап, 1996.

**Материаль – техник ҡулланмалар.**

- Интерактив таҡта
- компьютер

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт.**

1. Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се синыф башҡорт балалары өсөн тел һәм уҡыу дәреслеге. Х.А. Толомбаев. – Өфө: Китап, 2009
2. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
3. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре:**

Диктант – 2

Диктанттар күләме: 30-35 һүҙ

Һүҙлек диктанты: 10-12 һүҙ

Календарь –тематик план 4 синыф

Программа буйынса: 34 сәғ.
План буйынса: 32 сәғ.

| № | | Тема | План. дата | Факт. дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **1. Беренсе сентябрь. Белем көнө.** | | | |
| 1. | 1.1 | Тәүге көн. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. | 06.09 | | |
| | | **2.Мәктәптә.** | | | |
| 2. | 2.1 | "Уҡырға кем бара ?" Ялғауҙар. Р.Ғәббәсова "Яңы мәктәп ". Кем ? Кемдәр? | 13.09 | | |
| | | **3.Ғаилә.Хеҙмәт.** | | | |
| 3. | 3.1 | Һөнәрҙәр. Ф.Туғыҙбаева " Икмәк көсө " -сы,-се,-со,сө ялғауҙары | 20.09 | | |
| 4. | 3.2 | Контроль диктант. " Алтын көҙ."Ф.Фәтҡуллина "Эшҡыуарҙар". Антонимдар. | 27.09 | | |
| 5. | 3.3 | Хаталар өҫтөндә эш.Хәйерле иртә! Янғыҙлыҡ исемдәр. Ф.Ғәбиҙуллина Тамырҙар. Уртаҡлыҡ исемдәр. | 04.10 | | |
| | | **4. Буш ваҡыт.Хобби.** | | | |
| 6. | 4.1 | Ғ.Хөсәйенов "Кеше ғүмере". Ҡылым.Ҡылымдарҙың күплек ялғауҙары. | 18.10 | | |
| 7. | 4.2 | Минең көндәлегем.Ҡылымдың күплек ялғауҙары. | 25.10 | | |
| 8. | | Ә.Сөләймәнов "Яңы аш".Ҡылымдарҙын зат ялғауҙары. | 08.11 | | |
| 9. | 4.3 | . Ф.Фәтҡуллина "Аквариум балыҡтары". Ҡылымдарҙын һан һәм зат ялғауҙары. | 15.11 | | |
| 10. | 4.4 | Г.Юнысова " Нинәләр?". Башҡорт телендә һорау мәғәнәһе. Минен мәктәпкә юлым. Ҡылымды тикшереү өлгөһө. | 22.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **5. Транспорт. Юл. Сәйәхәт.** | | | |
| 11. | 5.1 | А.Әхтәмова”Троллейбуста”. Исемдәрҙең берлектә һәм күплектә зат менән үҙгәреүе. | 29.11 | | |
| 12. | 5.2 | Беренсе ярҙам. Башҡорт телендә бойороу мәғәнәһе. | 06.12 | | |
| 13. | 5.3 | Сәйәхәт. Ҡылымдарҙын барлыҡ һәм юҡлыҡ формаһы. | 13.12 | | |
| | | **6.Табипта.Поликлиникала.** | | | |
| 14. | 6.1 | Беренсе ярҙам.Башҡорт телендә бойороу мәғәнәһе. | 20.12 | | |
| 15. | 6.2 | Ғ.Шәмсетдинова “Конькиҙар”. Телмәр үҫтереү. “Кем көслө?” | 27.12 | | |
| | | **7. Почтала.** | | | |
| 16. | 7.1 | Почта. С.Агиш “Бүләк”. | 17.01 | | |
| | | **8. Башкортостан тәбиғәте.** | | | |
| 17. | 8.1 | Дүрт миҙгел. Һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Был ниндәй ваҡыт? Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр. | 24.01 | | |
| 18. | 8.2 | Башҡортостан тәбиғәте.Һаналып килеүсе һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре. | 31.01 | | |
| 19. | 8.3 | Яҙ етә.Һаналып килгән һүҙҙәр арһында тыныш билдәләре. | 07.02 | | |
| 20. | 8.4 | Ф.Бәширова “Үгәй инә япрағы”. Һорау һөйләмдәрҙә интонация. | 14.02 | | |
| 21. | 8.5 | “Имән сәтләүеге”. Өндәү һөйләмдәрҙә интонация. | 21.02 | | |
| 22. | 8.6 | С.Кәрим. “Һабаҡ”, “Балыҡтар”.өндәү һөйләмдәр. | 28.02 | | |
| | | **9. Башкортостанда иҫтәлекле урындар.** | | | |
| 23. | 9.1 | Башҡортостан.Салауат Юлаев –башҡорт халҡының милли геройы. Һөйләмдә һорау мәғәнәһенең бирелеше. | 07.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 24. | 9.2 | Өфө ҡалаһы.Һаналып килеүсе һүҙҙәр. | 14.03 | | |
| 25. | 9.3 | И.Күсемов “Шүлгәнташ мәмерйәһе”. Ҡылымдын затта,һанда,заманда үҙгәреүе. | 21.03 | | |
| 26. | 9.4 | Башҡортостан ынйылары. Янғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 04.04 | | |
| | | **10.Башҡортостандын күренекле шәхестәре.** | | | |
| 27. | 10.1 | Муса Мортазин. Ябай һәм ҡушма һандар. | 11.04 | | |
| 28. | 10.2 | Исмәғил Тасимов. Рәт һандары. | 18.04 | | |
| 29. | 10.3 | Ҡасим Дәүләткилдеев.Фәйзи Ғәскәров. Йыйыу һәм сама һандары. | 25.04 | | |
| | | **11.Ауыл тормошо.** | | | |
| 30. | 11.1 | Сөмбөлә-уныш байрамы. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Әкиәттәр. “Бесәй,Юлбарыҫ һәм Кеше”, “Төлкө менән ТОРНА”. “Ҡурай тарихы”, | 16.05 | | |
| 31. | 11.2 | Контроль диктант. “Баҡсала”. | 23.05 | | |
| 32. | 11.3 | Хаталар өҫтөндә эш. “Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр” темаһы буйынса йомғаҡлау дәресе. | 30.05 | | |
| | | Резерв дәрес | | | |

Пронумеровано и прошнуровано
9 ( девять ) листов
«___» ___________ 201 г.
Директор
_____________ А.А. Афанасьев

ГБОУ
Стерлибашевская
КШИ
ОГРН 1020201337736
ИНН 0241003061